МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АЌБУҘАТ” БАЛАЛАР БАЌСАҺЫ

# Проект эше:

# "Башкорт халкынын кәсептәре"

Әзерләне:
Тәрбиәселәр
Коломбәтова Ф.Ш.
Изрисова Р.Х.

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ КӘСЕПТӘРЕ

**Р.Х.ИҘРИСОВА**, тәрбиәсе,
**Ф.Ш.ҠОЛОМБӘТОВА**, тәрбиәсе
муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге – “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы

**Инеш һүҙ**

Борон - борондан башҡорт иле үҙенең төп законына - йолаға - нигеҙләнеп йәшәгән, үҫешкән. Оло хаҡы, кесе хаҡы, ҡатын хаҡы, ир хаҡы, бала йәки баба хаҡы, йәғни Кеше хаҡын фәҡәт йола ғына теүәл һаҡлаған. Олоно оло итеү, туған менән туған, кеше менән кеше араһындағы мөнәсәбәттәрҙең тейешле ыңғай барышы, йәғни гармонияһы, берҙән - бер хоҡуҡи сара - йолаға - бойһонған.

“Башҡорт халыҡ ижады” китабының 1 - се томында баш һүҙ мөхәрирриәттән бирелгән. Ошо китаптың инеш мәҡәләһе авторҙары Ә.Сөләймәнов менән Р.Солтангәрәева “йола” терминына шундай аңлатма биргәндәр: “Ғүмерҙең, йылдың һәр миҙгеле, айы, көнө һәр кемдән билдәле ҡағиҙәләрҙең үтәлеүен талап итә. Кешенең һәр бер аҙымы, хатта ниәт - маҡсаттары ла борондан ҡанундарға яраҡлаштырылған. Улар бөтә кешеләргә лә фарыз иҫәпләнгән, шул йола үтәү, йола”.

Боронғо йолаларға килгәндә, башҡорт халҡының һәр кәсебенә лә ҡағышлы төрлө кәңәштәр, тыйыуҙар ҙа булған.

<u>Мәҫәлән, мал көткәндә:</u>

-Һарайҙы таҙа тотһаң,сауабы ҙур була;

-Малды ҡарғама, һуҡма - ул да тере йән;

- Мал ҡыуған таяҡты ҡапҡа тышына һөйәһәң, мал үҙе ҡайта;

-Бәлә - ҡаза килер булһа, тауыҡ әтәс булып ҡысҡырыр, эт олор;

-Бесәй битен йыуһа, сәпсек тәҙрәнән ҡараһа, ҡунаҡ килеүгә һ.б.

**Актуаллелеге:**

Халҡыбыҙҙа йәш быуынға иман, әҙәп, тәртип ҡанундарына бәйле саралар ойоштороуҙа, уларҙың рухын көсәйтеүҙә, халҡыбыҙ тарихын, көнкүрешен, йәшәү рәүешен үҙләштереүҙә даими эштәр башҡарыла.

Әлбиттә, баланың рухи донъяһы формалашыуында быуаттар аша һаҡланып килгән йолалар, уйындар, байрамдар, халыҡ ижады сәнғәте ҙур роль уйнай. Халҡыбыҙ хазинаһы менән баланы сәңгелдәктән үк тәрбиәләү мөһим. Беҙҙең тәрбиә эшенә килгәндә - был эшкә тағы ла бик ҙур урын бирелә.

Балалар баҡсаларында, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кескәйҙәр генә түгел, өлкән төркөм балалары башҡорт халҡының көнкүреше менән таныш булмаған мәлдәр осрай. Ата - әсәләр был тема менән ҡыҙыҡһынмайҙар һәм үҙ ғаиләһендә башҡорт халҡының йәшәү шарттарын асыҡлап мәғлүмәт бирмәйҙәр. Шуға ла был эште кесе йәштәге балалар менән башлау отошло буласаҡ.

Бала социумдың хоҡуҡлы ағзаһы булараҡ халыҡтың мәҙәни мираҫын үҙләштереп, һаҡлап, үҫтереп киләсәк быуынға тапшырырға тейеш.

Рәсәйҙә һуңғы йылдарҙағы үҙгәрештәр бөгөнгө көндә балалар баҡсаһы алдында айырыуса ҡатмарлы маҡсаттар ҡуя. Шуға күрә тыуған илебеҙгә бөтә яҡтан өлгөргән шәхесте үҫтереү, тыуған телен белеү, үҙ халҡының тарихын, ғөрөф - ғәҙәттәрен, мәҙәниәтен белгән тәрбиә эшенең төп эше булып тора.

Проект эшендә кескәй балаларҙы халыҡтың йәшәү, көнкүреш әйберҙәре, шөғөлө менән ҡыҙыҡһындырырға, аңлатмалар биреп, төрлө ойоштороу белем биреү эшмәкәрлегендә ҡулланырға һәм көндөң төрлө режим ваҡытында нығытыу эшен алып барырға була.

**Проект төрө**: белем биреү

**Үткәреү ваҡыты**: оҙайлы (октябрь - май).

**Проектың әһәмиәте:** башҡорт халҡының көнкүреше буйынса проекты тормошҡа ашырыу һәм тупланған тәжрибәне киң ҡулланыуҙа тәьмин итеү.

**Проекта ҡатнашыусылар**: тәрбиәселәр, балалар (тәрбиәләнеүселәр), ата - әсәләр (законлы вәкилдәр).

**Маҡсат:**

-балаларҙы башҡорт халҡының боронғо көнкүреше, кәсептәре – солоҡсолоҡ, малсылыҡ менән таныштырыу;

**Бурыстар**:

-кескәй йәштәге балаларҙы башҡорт халҡының көнкүреше, кәсептәре менән таныштырыу;

-шарттар булдырыу;

-бәйләнешле телмәр үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу;

-башҡорт халҡының көнкүрешенә, кәсебенә һәм ғөрөф - ғәҙәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм уларға ҡарата ихтирам тәрбиәләү;

**Ата-әсәләр өсөн:**

-проект буйынса саралар планын төҙөү, ошо проблема буйынса үҫтереүсе предметлы мөхитте байытыу, күргәҙмә материал тупларға йәлеп итеү;

-ҡыҙыҡһыныу уятыу;

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

тема буйынса үҫтереүсе предметлы мөхитте байытыу, тулыландырыу;

**Проекты тормошҡа ашырыу планы:**

**I этап.** Әҙерлек этабы: (октябрь)

-мәғлүмәттәр эҙләү, өйрәнеү, тикшеренеү;

-проблеманы анализлау, маҡсат һәм бурыстар ҡуйыу;

-методик әҙәбиәт туплау;

-проектты тормошҡа ашырыу планын эшләү;

**II этап.** Проектың төп өлөшө**:** (октябрь-май)

**Балалар менән эшмәкәрлек:**

-ҡуйылған маҡсат һәм бурыстарҙы тормошҡа ашырыу;

-әңгәмәләр үткәреү;

-консультациялар: “Боронғо башҡорт торлағы”, “Халҡымдың биҙәктәре”, “Аш - һыу төрҙәре” һ.б.;

-папка - йәймәләр, альбомдар: “Халыҡ кейеме”, “Башҡорт аты”, “Аш - һыу төрҙәре” һ.б.;

-балалар ижадынан күргәҙмә ойоштороу: “Балаҫ”, “Бейәләйҙәр”, “Башҡорт һауыты” һ.б.;
-дидактик уйындар уйнау: “Башҡорт балаҫы”, “Һауыттарҙың өлөшөн тап”, “Тирмәне биҙә” һ.б.;
-сюжетлы - роле уйындар уйнау;
**Ата-әсәләр менән эш:**
-малсылыҡ тураһында фотостенд әҙерләү;
-тирмә конструкцияһын төҙөү. Тирмә эсендәге кәрәк - яраҡ әйберҙәрҙе әҙерләүгә йәлеп итеү;
-консультациялар, нәфис әҙәбиәт туплатыу;
-папка - йәймә, кейемдәр, һауыт – һаба һ.б. эш төрҙәрен берлектә үтәү;
**III этап.** Йомғаҡлау: (май)
-материалдарҙы туплау һәм эшкәртеү;
-маҡсат итеп ҡуйылған һөҙөмтәләр менән килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе сағыштырыу;
-педагогик кәңәшмәлә проекты яҡлау һәм презентация күрһәтеү;

**Проекты тормошҡа ашырыу планы**

| Үҫеш өлкәләре | Эшмәкәрлек төрҙәре | Йөкмәткеһе | Үткәреү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| Телмәр үҫтереү өлкәһе | Нәфис әҙәбиәт<br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br>Әңгәмәләр: | -З.Ҡотлогилдина<br>“Ҡымыҙ бешә әсәйем”<br>-Р.Ниғмәтуллина<br>“Бал ҡорто”<br>-М.Хисмәтуллина<br>“Бүлмәгеҙ эште”<br>-А.Йәғәфәрова<br>“Минең атым”, “Ала һыйыр”, “Бәләкәстәр”<br>-С.Муллабаев: “Аҡ бәрәс”<br>“Эш табылды” - хикәйә<br>“Тирмәкәй”,<br>“Эт нисек үҙенә хужа тапҡан”<br>-Йомаҡтар, мәҡәлдәр<br>“Малсылыҡта – һыйыр малы”,<br>“Милли кейемдәр”<br>Башҡорт - ҡыҙҙарының биҙәүестәре | Октябрь<br><br>Ноябрь<br><br><br><br><br><br><br><br><br><br>Декабрь<br><br><br><br><br>Март |
| Художестволы эстетик үҫеш | Һүрәтләү:<br><br>Йәбештереү<br><br><br>Әүәләү:<br><br>Нәфис әҙәбиәт: | “Башҡорт кейеме камзул”,<br>“Башҡорт халыҡ тирмәһе”<br>“Сағыу башҡорт биҙәктәре”,<br>“Башҡорт орнаменты менән бейәләй биҙәү”<br>“Башҡорт халыҡ һауыт - һабалары<br>“Әсәйемә бауырһаҡ”<br>Р.Ураҡсина “Ҡорот”, “Ҡаймаҡ”,“Ҡатыҡ” | Декабрь<br><br>Февраль<br><br><br>Март<br><br>Апрель |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Танып белеү өлкәһе | Хәүефһеҙлек<br><br>Дидактик уйындар:<br><br><br><br>Эҙләнеү - тикшеренеү эшмәкәрлеге:<br><br><br>Әңгәмәләр<br>Дидактик уйындар<br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br>Сюжетлы – ролле уйындар<br>Экскурсия:<br>Нәфис әҙәбиәт | “Ни өсөн кешегә өй кәрәк?”<br>“Ниндәй өйҙәр була?”,<br>“Нимә артыҡ”<br>“Бейәләйҙең парын тап”,<br>“Башҡорт балаһы”<br>“Музейға сәйәхәт (тирмә менән танышыу)”.<br>“Һөт аҙыҡтары”,<br>“Ҡымыҙ”,<br>“Һарыҡ көтөүҙең файҙаһы”,<br>“Йорт хайуандары һәм уларҙың балалары”,<br>“Өйҙәр төрлө, төрлө була”, “Нимә ул умарта?”<br>Әсәһен тап”,<br>“Парын тап”,<br>“Бал ҡортона ярҙам ит”,<br>“Башҡорт тирмәһен төҙө”, “Дөрөҫ төркөмлә”,<br>“Ғаилә”, “Магазин”,“Артистәр”,һ.б.<br>“Сибай музейы”<br>А.Йәғәфәрова<br>“Минең атым” | Октябрь<br><br>Ноябрь<br><br>Декабрь<br>Ғинуар<br>Апрель<br><br>Ноябрь<br>Апрель<br><br><br>Декабрь<br>Ғинуар<br><br><br><br><br>Апрель<br><br><br>Февраль |
| Физик үҫеш.<br>Һау - сәләмәт тормош. | Хәрәкәтле уйындар<br><br>Бармаҡуйындары<br>Нәфис әҙәбиәт | “Аттар сабышы”, “Сүрәкә”, “Бура уйыны”, “Тура юлдан бар”һ.б.<br>Р.Раҡаева шиғырҙары<br>З.Йәнбирҙина “Колонсаҡ” | Апрель<br><br><br>Май |

**Ҡулланылған әҙәбиәт**:


-И.Д.Бураҡаева, М.С.Бураҡаева, М.Б.Юлмөхәмәтова Башҡорт мәҙәниәте (Тормош һабаҡтары). IX синыф өсөн дәреслек. - Өфө Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 2004.

-И.А.Арсланова Традиционная и современная башкирская кухня. Уфа, 1999.

-Э.В.Миһранова, С.Н.Шитова Башҡорт аш - һыуы // Башҡорт энциклопедияһы — Өфө:«Башҡорт энциклопедияһы» ғилми - нәшриәт комплексы, 2015 — 2017.

-М.Г.Муллагулов Хозяйство // Башкирская энциклопедия — Уфа: ГАУН «Башкирская энциклопедия», 2015 — 2017.

-М.В.Мурзабулатов Хозяйство башкир.// Башкортостан: краткая энциклопедия — Уфа: Башкирская энциклопедия, 1996.

-Г.Х.Умурзаков Древние башкиры: некоторые вопросы истории. Уфа, 1991.

-Интернет-ресурсы :

-http://ru.wikipedia.org/.

-http://www.mmenu.com/.

-http://www.gotovim.ru/.